# РАБОЧАЯ ПРОГРАММА
# по башкирскому языку как государственному языку РБ

## Уҡыу предметын өйрәнеүҙең һөҙөмтәләре.

Эш программаһы башланғыс кластарҙа “Башҡорт теле” предметының шәхси, предмет, метапредмет һөҙөмтәләрен үҫтереүгә йүнәтелгән.

**Шәхси үҫеш кимәле:**

Баланы шәхес итеп үҫтереү, кешелек сифаттарын тәрбиәләү. Уны үҙ аллы үҫешкә, камиллашыу оҫталығына өйрәтеү. һөҙөмтәлә уҡымышлы, үҙ еренең, иленең, халҡының ҡиммәттәренә төшөнгән, уны һанлаған һәм һаҡлаған, яҡлаған социум итеп формалаштырыуға башланғыс нигеҙ һалыу.

• тел кешеләрҙең аралашыу сараһы икәнде аңлау, үҙләштереү;
• башҡорт телен милли мәҙәниәттең бер күренеше тип ҡабул итеү;
• дөрөҫ һөйләү теле һәм яҙма тел кешенең индивидуаль мәҙәнилеге күрһәткесе;
• үҙ телмәренә иғтибарлы булып үҙ-үҙен баһалау һәләтлелеге
• башҡа кешеләрҙең яҙма һәм һөйләү телмәренә иғтибар итеү (интонация, темп, тон, һүҙҙәр һәм тыныш билдәләренең ҡулланылышы һ. б.).

Был һөҙөмтәләргә ирешеүҙең сараһы булып дәреслектәге күнегеүҙәр тора

**Предмет-ара кимәле:**

Универсаль эш төрҙәренә өйрәтеү: танып белеү, ойоштороу һәм коммуникатив эшмәкәрлек, йәғни баланы үҙ аллы уҡырға, белем алырға өйрәтеү. Универсаль эш төрҙәренә өйрәтеү: танып белеү, шәхси, ойоштороу һәм коммуникатив эшмәкәрлек. Шәхси эшмәкәрлек баланы уҡымышлы һәм аңлы шәхес итеп үҫтереү. Эшмәкәрлектә уның тормош һәм кешелеклелек ҡиммәттәрен, әхлаҡи һәм мораль нормаларҙы аңлап ҡабул итеүеп, әйләнә- тирәләге күренештәргә һәм ваҡиғаларға шәхси ҡарашын формалаштырыуға йүнәлтеү. Ойоштороу эшмәкәрлеге танып белеү процесы менән идара итеүҙе күҙ уңында тота: эшмәкәрлекте күҙаллау, планлашты- рыу, башҡарыу, тикшереү, үҙгәрештәр индереү һәм баһалауҙы үҙ эсенә ала. Танып белеү эшмәкәрлеге тейешле мәғлүмәтте эҙләп табыу һәм анализлауҙы, проблемаларҙы хәл итеү юлдарын эҙләүҙе һәм ҡулланыуҙы тәьмин итә.Аралашыу эшмәкәрлеге белем алыу процесында аралашырға өйрәнеүҙе ойоштороу ға йүнәлтелгән. Ул башҡа кешеләрҙе тыңлай белеү һәм аңлауҙы, мәғлүмәтте теүәл тапшырыуҙы үҙ эсенә ала.

• белем алыу (уҡыу-укытыу) бурыстарын хәл итеү өсөн төрлө сығанаҡтарҙан кәрәкле мәғлүмәт табыу маҡсатында, телде ҡуллана белеү оҫталығы;
• аралашыуҙың маҡсаты, бурысы, сараһы, тел шарттарында ориентирлашыу;
• телмәрҙе һәм аралашыу ситуацияһын иҫәпкә алып, коммуникатив бурыстарҙы (диалог, монологик телмәр, яҙма текстар) уңышлы атҡарыу маҡсатында, адекват телмәр сараларын һайлап ала белеү;
• үҙ фекерендә һәм позицияңды мөмкин тиклем теүәл итеп аңлатырга ынтылыу;
• һорауҙар биреү оҫталығы.

**Предмет кимәле:**

Уҡыу предметын өйрәнеүҙә яңы белем үҙләштереү, уны эшкәртеү һәм ҡулланыу өлкәһендә тейешле тәжрибә туплау.

• башҡорт әҙәби теле нормалары (орфоэпик, лексик, грамматик) һәм телмәр этикеты ҡағиҙәләре тураһында башланғыс төшөнсә алыу;
• орфографик ҡағиҙәләрҙе һәм тыныш билдәләрен (өйрәнелгән күләмдә) ҡуйыу ҡағиҙәләрен белеү;
• өн, хәреф, һүҙ өлөшө, телмәр киҫәге, һөйләм киҫәге, ябай һөйләм кеүек (өйрәнелгән күләмдә) тел берәмектәрен таба, сағыштыра, классификациялай (бүлә), ҡылыҡһырлай (характеристика бирә) алыу оҫталығы;

• үҙеңдең ғәмәлдәреңде контролдә тотоу, әйткәнде һәм яҙғанды тикшерә белеү һәләтлеге.

**2 класс**

**Шәхси сифаттарҙы үҫтереү өлкәһендә укыусы өйрәнә:**

- үҙ-аллы эш итергә, белем алыу процесына етди һәм яуаплы ҡарарға;
- мәктәп йыһаздарын, уҡыу әсбаптарын һаҡларға;
- -Тыуған илде яратырға, телде, илде һаҡларға;
- һаулыҡты һаҡларға;
- тиҫтерҙәреңә, уҡытыусыларға, атай-әсәйеңә, яҡындарыңа, мәктәп хеҙмәткәрҙәренә иғтибарлы һәм ихтирамлы булырға

**Метапредмет эш төрҙәрен үҙләштерергә:**

- үҙ-аллы уҡыу,мәғлүмәтле булыу оҫталығын камиллаштырыу,мәғлүмәти сығанаҡтар менән эш,эште планлаштырыу;
- алған мәғлүмәтте ҡағыҙға теркәү;билдәләмә,ҡағиҙә, алгоритм,һығымта һ.б. график схема,модель,таблица ярҙамында теркәргә;
- диалог ҡорорға,уҡыу материалын тикшерергә, анализларға, һығымта яһарға;
- мәҙәни аралашыу этикетына өйрәнергә: әңгәмәсене тыңлай, хуплай белергә,аңламағанды итәғәтле итеп һорашырға, яуап алырға һәм рәхмәтеңде белдерергә;
- үҙ фекереңде ҡыҫҡа һәм аңлайышлы итеп еткеререргә , уны яҡлай белергә тейеш.

**1.Регулятив (көйләүсе)универсаль укыу эшмәкәрлегенә** уҡыу процесын ойоштороу өсөн кәрәкле шарттар тыуҙырыусы эшмәкәрлек төрҙәре ҡарай:

- маҡсат ҡуйыу (элек өйрәнелгән һәм таныш булғанды таныш булмаған менән тап килтереп, сағыштырып, уҡыу мәсьәләһен билдәләй белеү);
- планлаштырыу (төп һөҙөмтәне күҙҙә тотоп, аралаш маҡсаттарҙың эҙмә-эҙлелеген асыҡлау; план төҙөү һәм эш төрҙәренең тәртибен билдәләү);
- прогноз яһау (һөҙөмтәне һәм белемде үҙләштереү кимәлен күҙаллау);
- контролләү (эшмәкәрлек ысулы-ның һәм уның һөҙөмтәһенең билдәләнгән эталонға тап килеү-килмәүен асыҡлау);
- төҙәтмәләр индереү (эталондан тайпылыштар булған осраҡта, планға һәм эшмәкәрлек ысулына өҫтәмәләр һәмтөҙәтмәләр индереү);
- баһалау (таныш булғанды әлегәсә таныш булмағандан айыра белеү; үҙләш-терелгәндең сифатын һәм кимәлен билдәләй алыу);
- үҙ-үҙеңде көйләү (ихтыяр көсөңдө туплап, ауырлыҡтарҙы еңеп сығыу).

**2. Танып белеү блогына дөйөм укыу (өйрәнеү, белем алыу) эшмәкәрлеге, логик эшмәкәрлек,** шулай уҡ проблеманы ҡуйыу һәм хәл итеү инә. Танып-белеү универсаль уҡыу эшмәкәрлеге:

- телмәр ситуацияһына ярашлы үҙеңдең фекереңде телдән әйтеү;
- төрлө формала бирелгән мәғлүмәтте таба белеү (тотош текст, иллюстрация, схема, таблица)*;*
- мәғлүмәтте бер форманан икенсе формаға үҙгәртә белеү (план, схема, таблица төҙөү)*;*
- һүҙлектәр, белешмә материал менән менән файҙалана белеү*;*
- анализлай һәм синтезлай белеү*;*
- сәбәп-һөҙөмтә бәйләнештәрен урынлаштыра белеү*;*
- фекерләй белеү;

**3. Коммуникатив эшмәкәрлек** социаль компетентлыҡты, аралашыусы һәм хеҙмәттәш партнерҙарыңдың позицияһын иҫәпкә ала, башҡа кешеләрҙе тыңлай һәм диалогка инә белеүҙе; проблемаларҙы коллектив менән хәл итеүҙә ҡатнашыуҙы, йәштәштәрең менән интеграциялашыуҙы, тиҫтерҙәрең һәм өлкәндәр менән продуктив хеҙмәттәшлек ойоштора белеүҙе тәьмин итә. Коммуникатив универсаль уҡыу эшмәкәрлеге:

- -һөйләү һәм яҙма формала яуап бирә белеү;
- телмәр сараларын төрлө коммуникатив мәсьәләләрҙе сисеүҙә дөрөҫ ҡулланыу;
- телмәрҙең диалогик һәм монологик формаларын яҡшы белеү;
- үҙеңдең фекереңде нигеҙләй белеү һәм дөрөҫ итеп башҡаларға еткерә алыу;
- башҡаларҙы ла ишетә һәм тыңлай белеү, уларҙың ҡараштарын аңларға тырышыу, кәрәк булғанда үҙеңдең ҡарашыңды төҙәтә белеү;
- дөйөм эшмәкәрлек барышында ҡарар ҡабул итә белеү;
- һораүҙар бирә белеү.

**Предмет буйынса белем алырға:**

- һүҙҙәрҙе мәғәнәһе буйынса төркөмләргә,уларға тейешле һорау ҡуйырға;
- һүҙҙәрҙең өнмоделен төҙөргә,уны хәрефтәр менән яҙырға;
- һөйләмдәр төҙөргә,уларҙы тулыландырырға;
- һөйләмдәрҙе әйтелеү маҡсатына ҡарап хәбәр,өндәү,һорау һөйләмдәргә айыра белергә;
- һөйләмдең баш киҫәктәрен белергә ;
- һөйләмдә һаналып киткән һүҙҙәр араһында өтөр ҡуйырға;
- башҡорт теленең дөрөҫ яҙылыш ҡанундарын, ҡағиҙәләрен үҙләштерергә;
- 8-10 һөйләмдән торған (35-40 һүҙ ) тексты күсереп яҙырға;
- 30-35 һүҙҙән торған тексты диктант итеп яҙа белергә;
- һүҙҙе ижеккә бүлергә,уны юлдан юлға күсерә белергә тейеш.

## 3 класс

**Шәхси сифаттарҙы үҫтереү өлкәһендә уҡыусы өйрәнә:**

- үҙаллылыҡҡа, белем алыуға етди һәм яуаплы ҡарау;
- мәктәп һәм класс йыһаздарына, уҡыу әсбаптарына һаҡсыл булыу;
- һаулыҡты нығытыу һәм һаҡлау;
- атай-әсәйгә, тиҫтерҙәренә, уҡытыусыларға, яҡындарына, мәктәп хеҙмәткәрҙәренә иғтибарлы һәм ихтирамлы булыу;
- тыуған ил, туған тел матурлығын, күркәмлеген тоя белеү, уларҙы һаҡлау, үҙ халҡының традицияларын, йолаларын өйрәнеү, таратыу.

**Метапредмет эш төрҙәрен үҙләштерергә:**

- уҡыу процесына яуаплы ҡарау, маҡсат ҡуйыу, эште планлаштыра белеү, уҡыу мәсьәләләрен сисә белеү.
- теге йәки был тема буйынса кәрәкле мәғлүмәт туплау, эҙләнеү эше алып барыу, уның буйынса презентация эшләй белеү.
- мәҙәниәтле аралашыу оҫталығына, телмәр этикетына эйә булыу, үҙ фекерен яҡлағанда, уй-тойғоларын еткерә алырлыҡ аныҡ, эҙмә-эҙ бәйән итеү, әңгәмәсенең уй-тойғоларын аңларға тырышыу, уның менән иҫәпләшә һәм уртаҡ фекергә килә белеү.
- билдәле кимәлдә башҡорт теленең лексик-фразеологик минимумын үҙләштереү һәм телмәрҙә ҡуллана белеү.

**1.Регулятив (көйләүсе)универсаль уҡыу эшмәкәрлегенә** уҡыу процесын ойоштороу өсөн кәрәкле шарттар тыуҙырыусы эшмәкәрлек төрҙәре ҡарай:

- маҡсат ҡуйыу (элек өйрәнелгән һәм таныш булғанды таныш булмаған менән тап килтереп, сағыштырып, уҡыу мәсьәләһен билдәләй белеү);
- планлаштырыу (төп һөҙөмтәне күҙҙә тотоп, аралаш маҡсаттарҙың эҙмә-эҙлелеген асыҡлау; план төҙөү һәм эш төрҙәренең тәртибен билдәләү);
- прогноз яһау (һөҙөмтәне һәм белемде үҙләштереү кимәлен күҙаллау);

- контролләү (эшмәкәрлек ысулы-ның һәм уның һөҙөмтәһенең билдәләнгән эталонға тап килеү-килмәүен асыҡлау);
- төҙәтмәләр индереү (эталондан тайпылыштар булған осраҡта, планға һәм эшмәкәрлек ысулына өҫтәмәләр һәм төҙәтмәләр индереү);
- баһалау (таныш булғанды әлегәсә таныш булмағандан айыра белеү; үҙләш-терелгәндең сифатын һәм кимәлен билдәләй алыу);
- үҙ-үҙеңде көйләү (ихтыяр көсөңдө туплап, ауырлыҡтарҙы еңеп сығыу).

**2. Танып белеү блогына дөйөм уҡыу (өйрәнеү, белем алыу) эшмәкәрлеге, логик эшмәкәрлек,** шулай уҡ проблеманы ҡуйыу һәм хәл итеү инә. Танып-белеү универсаль уҡыу эшмәкәрлеге:

- телмәр ситуацияһына ярашлы үҙеңдең фекереңде телдән әйтеү;
- төрлө формала бирелгән мәғлүмәтте таба белеү (тотош текст, иллюстрация, схема, таблица)*;*
- мәғлүмәтте бер форманан икенсе формаға үҙгәртә белеү (план, схема, таблица төҙөү)*;*
- һүҙлектәр, белешмә материал менән менән файҙалана белеү*;*
- анализлай һәм синтезлай белеү*;*
- сәбәп-һөҙөмтә бәйләнештәрен урынлаштыра белеү*;*
- фекерләй белеү;

**3. Коммуникатив эшмәкәрлек** социаль компетентлыҡты, аралашыусы һәм хеҙмәттәш партнерҙарыңдың позицияһын
иҫәпкә ала, башҡа кешеләрҙе тыңлай һәм диалогка инә белеүҙе; проблемаларҙы коллектив менән хәл итеүҙә ҡатнашыуҙы, йәштәштәрең менән интеграциялашыуҙы, тиҫтерҙәрең һәм өлкәндәр менән продуктив хеҙмәттәшлек ойоштора белеүҙе тәьмин итә. Коммуникатив универсаль уҡыу эшмәкәрлеге:

- һөйләү һәм яҙма формала яуап бирә белеү*;*
- телмәр сараларын төрлө коммуникатив мәсьәләләрҙе сисеүҙә дөрөҫ ҡулланыу;
- телмәрҙең диалогик һәм монологик формаларын яҡшы белеү;
- үҙеңдең фекереңде нигеҙләй белеү һәм дөрөҫ итеп башҡаларға еткерә алыу*;*
- башҡаларҙы ла ишетә һәм тыңлай белеү, уларҙың ҡараштарын аңларға тырышыу, кәрәк булғанда үҙеңдең ҡарашыңды төҙәтә белеү*;*
- дөйөм эшмәкәрлек барышында ҡарар ҡабул итә белеү*;*
- һорауҙар бирә белеү.

**Предмет буйынса белем алырға:**

- һүрәтләү, хикәйәләү тибындағы текстарҙы тыңлау һәм аңлап ҡабул итеү.
- бирелгән тема буйынса диалог төҙөү;  диалогты дауам итеү.
- программала бирелгән шиғырҙарҙы яттан тасуири һөйләй белеү.
- тексты дөрөҫ, аңлы, тасуири уҡыу.
- ижади диктанттар, өйрәтеү изложениелары һәм иншалары яҙыу; иптәшең яҙғанын һәм үҙ яҙмаларыңды тикшереү, камиллаштыра белеү күнекмәләре.
- -өйҙә башҡортса гәзит-журналдар, китаптар уҡыу һәм класта шулар тураһында фекер алышыу (кластан тыш уҡыу күнекмәләре).

## 4 класс

**Шәхси сифаттарҙы үҫтереү.**

• Үҙаллылыҡҡа, белем алыуға етди һәм яуаплы ҡарау;
• Мәктәп һәм класс йыһаздарына, уҡыу әсбаптарына һаҡсыл булыу;
• Һаулыҡты нығытыу һәм һаҡлау;
• Атай-әсәйгә, тиҫтерҙәренә, уҡытыусыларға, яҡындарына, мәктәп хеҙмәткәрҙәренә иғтибарлы һәм ихтирамлы булыу;

• Тыуған ил, туған тел матурлығын, күркәмлеген тоя белеү, уларҙы һаҡлау, үҙ халҡының традицияларын, йолаларын өйрәнеү, таратыу.

**Предмет һөҙөмтәләре.**

• Һүрәтләү, хикәйәләү тибындағы текстарҙы тыңлау һәм аңлап ҡабул итеү.
• Бирелгән тема буйынса диалог төҙөү; диалогты дауам итеү.
• Программала бирелгән шиғырҙарҙы яттан тасуири һөйләй белеү.
• Тексты дөрөҫ, аңлы, тасуири уҡыу.
• Ижади диктанттар, өйрәтеү изложениелары һәм иншалары яҙыу; иптәшең яҙғанын һәм үҙ яҙмаларыңды тикшереү, камиллаштыра белеү күнекмәләре.
• Өйҙә башҡортса гәзит-журналдар, китаптар уҡыу һәм класта шулар тураһында фекер алышыу (кластан тыш уҡыу күнекмәләре).

**Универсаль уҡыу эш төрҙәрен үҙләштереү**.

• Уҡыу процесына яуаплы ҡарау, маҡсат ҡуйыу, эште планлаштыра белеү, уҡыу мәсьәләләрен сисә белеү.
• Теге йәки был тема буйынса кәрәкле мәғлүмәт туплау, эҙләнеү эше алып барыу, уның буйынса презентация эшләй белеү.
• Мәҙәниәтле аралашыу оҫталығына, телмәр этикетына эйә булыу, үҙ фекерен яҡлағанда, уй-тойғоларын еткерә алырлыҡ аныҡ, эҙмә-эҙ бәйән итеү, әңгәмәсенең уй-тойғоларын аңларға тырышыу, уның менән иҫәпләшә һәм уртаҡ фекергә килә белеү.
• Билдәле кимәлдә башҡорт теленең лексик-фразеологик минимумын үҙләштереү һәм телмәрҙә ҡуллана белеү.

## Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе.

## 1 класс

**Танышыу– 3 сәғәт.**
Уҡыусылар алфавит менән таныша, башҡорт теленең специфик өндәрен өйрәнә. Һүҙ һәм һүҙбәйләнештәр төҙөй белеү күнекмәләрен булдырыу маҡсат итеп алына. Башҡортостандың ҡалалары, ауылдары, йылғалары, күлдәре тураһында мәғлүмәт биреү. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен ҡабатлау, темаға ҡараған башҡорт һүҙҙәрен дөрөҫ әйтеү күнекмәләрен камиллаштырыу.

**Ғаилә – 2 сәғәт.**
Үҙенең ғаиләһе, ғаилә ағзалары, уларҙың эштәре, туғанлыҡ мөнәсәбәте тураһында һөйләшеү. Башҡорт телендә эйәлек ялғауҙарын практик үҙләштереү.

**Мәктәп- 10 сәғәт.**
Уҡыу эшмәкәрлеге, уҡыу әсбаптары, уларҙы бөхтә тотоу. Көн режимы,таҙалыҡ, йыйнаҡлыҡ. Класта дуҫлыҡ, берҙәмлек, иман тураһында һөйләшеүҙәр, әҫәрҙәр уҡыу.Башҡорт телендә өндәрҙең, хәрефтәрҙең дөрөҫ әйтелеше һәм яҙылышы. *Ярай, ярамай, мөмкин* һүҙҙәренең ҡулланышын активлаштырыу.

**Төҫтәр-2 сәғәт.** Төҫ исемдәре менән таныштырыу.

**Һандар-2 сәғәт.** Һандарҙы дөрөҫ әйтергә өйрәтеү. Нисә? Күпме? Нисәнсе? һорауҙары менән таныштырыу.

**Уйынсыктар-4 сәғәт.** Уйындар,уйынсыҡтар исемдәре менән таныштырыу.

**Кем ни эшләй?- 3 сәғәт.** Кем ни эшләй? Һорауына яуап бирергә өйрәнеү. Яңы һүҙҙәрҙе үҙләштереү.

**Тән өлөштәре – 2 сәғәт.** Кешенең организмы, тән өлөштәре атамаларын үҙләштереү, тәнде таҙа тотоу, һаулыҡты һаҡлау. Эйәлек алмаштарын һәм ялғауҙарын практик ҡулланыу.

**Кейем-һалым-3 сәғәт.**
Кейем исемдәрен үҙләштереү, элек өйрәнгәндәрҙе иҫкә төшөрөү. Кейемде һаҡлап, ҡәҙерләп тотоу, һәр береһен үҙ урынына ҡуйыу. Кейем һәм шәхси гигиена. Кейем һәм матурлыҡ, тыйнаҡлыҡ тураһында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу. Шиғырҙар ятлау.
**Йорт хайуандары, кoштар – 3 сәғәт.**
Йорт хайуандары, ҡоштар, уларҙың атамалары менән танышыу. Телмәрҙә дөрөҫ ҡулланырға өйрәнеү.
**Ҡырағай хайуандар һәм ҡоштар- 1 сәғәт.** Кейектәр, ҡырағай ҡоштар тураһындағы мәғлүмәттәр биреү.Яңы һүҙҙәрҙе үҙләштереү.Һүҙлек запасын байытыу.
**Этнокультуралы белем биреү ресурстары дәрес планында ҡарала.**

## 2 класс

**Тыуған Башҡортостан – 1 сәғәт.**
Уҡыусылар алфавит менән таныша, башҡорт теленең специфик өндәрен өйрәнә. Һүҙ һәм һүҙбәйләнештәр төҙөй белеү күнекмәләрен булдырыу маҡсат итеп алына. Башҡортостандың ҡалалары, ауылдары, йылғалары, күлдәре тураһында мәғлүмәт биреү. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен ҡабатлау, темаға ҡараған башҡорт һүҙҙәрен дөрөҫ әйтеү күнекмәләрен камиллаштырыу.
**Һаумы мәктәп- 5 сәғәт.**
Балаларҙың үҙҙәре уҡыған мәктәп, уның үҙенсәлекле билдәләрен, урынлашыуын, кабинеттарын белеүе. Һүҙҙәрҙең предметты, билдәне, эште белдереүе.
**Тән өлөштәре – 4 сәғәт.**
Кешенең организмы, тән өлөштәре атамаларын үҙләштереү, тәнде таҙа тотоу, һаулыҡты һаҡлау. Эйәлек алмаштарын һәм ялғауҙарын практик ҡулланыу.
**Һанай беләһеңме? – 3 сәғәт.**
Аҙыҡ-түлек, кейем-һалым хаҡы, уларҙың үлсәме, уларҙы һатып алыу, тәртипле тотоноу. Телмәрҙә һандарҙы практик ҡулланыу.
**Кейем-һалым-2 сәғәт.**
Кейем исемдәрен үҙләштереү, элек өйрәнгәндәрҙе иҫкә төшөрөү. Кейемде һаҡлап, ҡәҙерләп тотоу, һәр береһен үҙ урынына ҡуйыу. Кейем һәм шәхси гигиена. Кейем һәм матурлыҡ, тыйнаҡлыҡ тураһында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу. Шиғырҙар ятлау.
**Ғаилә – 3 сәғәт.**
Үҙенең ғаиләһе, ғаилә ағзалары, уларҙың эштәре, туғанлыҡ мөнәсәбәте тураһында һөйләшеү. Башҡорт телендә эйәлек ялғауҙарын практик үҙләштереү.
**Йорт хайуандары, кoштар – 3 сәғәт.**
Йорт хайуандары, ҡоштар, уларҙың атамалары менән танышыу. Телмәрҙә дөрөҫ ҡулланырға өйрәнеү.
**Аҙыҡ – түлек – 4 сәғәт.**
Аҙыҡ-түлек атамалары менән танышыу, башҡорт халыҡ аштары тураһында һөйләшеү. Килеш ялғауҙарын пратик үҙләштереү.
**Уйындар, уйынсыҡтар – 2 сәғәт.**
Уйынсыҡ исемдәре, билдәләре, уйындар. Башҡорт телендә ҡалын һәм нәҙек ялғауҙар.
**Һөнәрҙәр – 2 сәғәт.**
Кешеләрҙең һөнәрҙәре тураһында мәғлүмәт. Һөйләмдә хәбәрҙең урыны.
**Үтелгәндәрҙе ҡабатлау-5 сәғәт**
Икенсе класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау, нығытыу, йомғаҡ яһау.
**Этнокультуралы белем биреү ресурстары дәрес планында ҡарала.**

## 3 класс

**Һаумы, мәктәп!- 1 сәғәт.** Һин кем? Һорауын үҙләштереү, башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре, башҡорт һәм рәс алфавиттарын сағыштырыу. Уҡыу эшмәкәрлеге, уҡыу әсбаптары, уларҙы бөхтә тотоу. Көн режимы,таҙалыҡ, йыйнаҡлыҡ. Класта дуҫлыҡ, берҙәмлек, иман тураһында һөйләшеүҙәр,әҫәрҙәр уҡыу.

**Мин танышам. 4 сәғәт.** Һеҙ кем? Һинең исемең нисек? Һин ҡайҙа йәшәһең? Һиңә нисә йәш? Һорауҙарын үҙләштереү. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре.

**Мин белем алам. 4 сәғәт.** Мәктәп ниндәй? Класс ниндәй? ?орауҙары. Һөйләм. Һорау һәм хәбәр һөйләмдәр.

**Мин һәм минең ғаиләм. 4 сәғәт.** Ғаилә ағзалары, уларҙың үҙеңә туғанлыҡ мөнәсәбәттәре. Был атамаларҙы үҙләштереү. Темаға бәйләнешле яҡындарҙың эш-шөғөлдәре, уй-хыялдары, киләсәккә пландары. Ғаилә шәжәрәһе, уның әһәмиәте хаҡында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу.

**Мин һөнәр һайлайым. 3 сәғәт.** Һөнәр атамалары, таныш һәм яҡын кешеләрҙең шөғөл-һөнәрҙәре, уларҙың яҡшы сифаттары тураһында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу. Кем ҡайҙа эшләй? һорауын үҙләштереү.

**Мин тәбиғәтте яратам. 5 сәғәт.** Кеше һәм тәбиғәт. Башҡортостан тәбиғәте. Беҙҙә йәшәгән кейектәр, үкемлектәр, бөжәктәр. Кешенең уларға мөнәсәбәте. Тәбиғәткә һаҡсыллыҡ тураһында һөйләшеүҙәр.

Башҡорт телендә синоним һүҙҙәрҙе сағыштырыу, ҡылымдарҙың заман формаларын, ҡаршы ҡуйыу теркәүестәрен практик үҙләштереү. Телмәр күнекмәләрен ҡамиллаштырыу.

**Минең яраткан миҙгелем. 3 сәғәт.** Башҡортостанда, үҙебеҙ йәшәгән төйәктә көҙ, ҡыш, яҙ, йәй миҙгелдәре, уларҙың билдәләре. Тәбиғәттең төрлө күренештәре. Миҙгелдәргә ярашлы балаларҙың эштәре, уйындары тураһында һөйләшеүҙәр, әҫәрҙәр уҡыу, мәҡәлдәр, һынамыштар менән танышыу.

Көн торошона бәйле һүҙҙәрҙе дөрөҫ ҡулланыу, телмәр күнекмәләрен үҫтереү, һөйләм төрҙәре.

**Минең гардеробым. 3 сәғәт.** Ниндәй? һорауын үҙләштереү. Кейем исемдәрен үҙләштереү, элек өйрәнгәндәрҙе иҫкә төшөрөү. Кейемде һаҡлап, ҡәҙерләп тотоу, һәр береһен үҙ урынына ҡуйыу. Кейем һәм шәхси гигиена. Кейем һәм матурлыҡ, тыйнаҡлыҡ тураһында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу. Шиғырҙар ятлау.

**Минең тыуған көнөм. 2 сәғәт.** Ҡасан? Һорауын үҙләштереү.Ҡотлау һүҙҙәрен, теләктәрҙе әйтә белеү, бүләк биреү, бүләк алыу этикетын үҙләштереү.

**Мин сәйәхәтсе. 3 сәғәт.** Нимә менән? Нисек? Һорауҙарын үҙләштереү. Сәйәхәт, уның кешегә файҙаһы, әһәмиәте, сәйәхәт урындары, йүнәлештәре, спорт һәм сынығыу тураһында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу.

**Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. 2 сәғәт.** Уҡыу йылы буйынса өйрәнелгәндәрҙе ҡабатлау, белгәндәрҙе тәрәнәйтеү, һүҙлекте байытыу. Телмәр күнекмәләрен камиллаштырыу

**Этнокультуралы белем биреү ресурстары дәрес планында ҡарала.**

## 4 класс

**Көн дә мәктәпкә барам. 6 сәғәт.** Лексик темаға ярашлы ситуациялар буйынса диалог ҡороу.Иҫәнләшеү. Танышыу диалогы. Һин ҡайҙан? Һиңә нисә йәш? Һинең туғандарың бармы? (Сәнғәтле һөйләшеү.) Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре һәм хәрефтәре.

**Мин ғаиләмде яратам. 6 сәғәт.** Был нимә? Был кем? Ул ниндәй? Бармы? Нимә эшләй? Һорауҙарына яуап бирергә өйрәнеү. Һүҙҙәргә дөрөҫ баҫым ҡуя белеү. Ғаилә ағзалары тураһында өлгөгә оҡшатып һөйләргә өйрәнеү.

**Үҙем йәшәгән ер тураһында һөйләйем. 6 сәғәт.** “Мин йәшәгән Ер” темаһы буйынса һүҙлек байлығын арттырыу. Ер шары, Тыуған ил, тыуған төйәк төшөнсәләре тураһында һөйләшеүҙә, фекер алышыуҙа ҡатнашыу.

**Ауылда/ҡалала йәшәйем. 5 сәғәт.** Ауыл һәм ҡала тормошоноң айырмаһын билдәләй алыу, тема буйынса яңы һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Үҙең йәшәгән ауыл тураһында бәйләнешле текст төҙөй белеү.
**Йыл миҙгелдәре һәм һауа торошо тураһында һөйләшәбеҙ. 5 сәғәт.** Үҙҙәренең яратҡан миҙгеле тураһында һөйләргә өйрәнеү. Парҙар менән, төркөмдә эшләү. “Рәүеш” һүҙ төркөмө менән танышыу. Һауа торошона бәйле һынамыштар ятлау.
**Төрлө хәлдәр тураһында һөйләшәбеҙ.4 сәғәт.** Ҡылымдарҙы телмәрҙә дөрөҫ ҡуллана белеү. Үҙҙәренең хыялдары тураһында һөйләргә өйрәнеү, һорауҙарға яуап биреү, һүҙлектәр менән эшләй белеү.
**Һатып алырға өйрәнәм. 4 сәғәт.** Кейем-һалым атамаларын әйтә, тасуирлай белеү. Һүҙҙәрҙе мәғәнәһе буйынса төркөмләй, дөйөмләштерә белеү, кейемде бөхтә, таҙа тотоу ҡағиҙәләрен белеү.

**Этнокультуралы белем биреү ресурстары дәрес планында ҡарал**